Башҡортостан Республикаһы мәғариф министрлығы

Муниципаль район Әлшәй районы

Раевка ауылы Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге башҡорт лицейы

# «Тыуған ерем - Әлшәйем»

## әҙәби - музыкаль кисә

Башҡорт теле һәм әҙәбиәт

уҡытыусыһы Муллағәлина

Миләүшә  Хәлил ҡыҙы үткәрҙе

**Тыуған ерем – Әлшәйем**

(Башҡортостандың Гимнын йырлау)

- Һаумыһығыҙ, туғандар!
- Һаумыһығыҙ, уңғандар!
- Һаумыһығыҙ, сәсәндәр!
- Һаумыһығыҙ, башҡорттар!
- Әлшәй халҡы теләй һеҙгә
- **Хоҙайҙан иҫәнлектәр!**
- Әлшәй тигән яҡтарҙан,
- Әлшәй матурҙарынан,
- Әлшәй батырҙарынан,
- Меңле тигән ырыуҙан,
- Йәмле Дим буйҙарынан,
- Тыуып – үҫкән еребеҙҙән,
- Тапшырабыҙ **ҡайнар сәләм!**

(ҡурай тауышы аҫтында әкиәтә һөйләү
видео ”Ҡаһым түрә” )

1.Борон-борон заманда,
Урманда ла яланда,
Гөл-сәскәле аҡланда
Йәшәгән,ти,шат халыҡ.

2.Һунар иткән,балыҡ тотҡан,
Көтөү-көтөү йылҡы көткән,
Бейә һауып ҡымыҙ бешкән,
Йүкә һуйып арҡан ишкән,

3. Йөрөшкәндәр ҡунаҡҡа,
Яҡынға һәм йыраҡҡа.
Барлыҡ ырыу дуҫ йәшәгән,
үҙ ерен яҡлағандар,
Мөхитте һаҡлағандар.

4. Ләкин яуыз хандар килеп
Яһаҡ даулай башлағандар,
Көтөүлеген киткән тапап,
Урман ҡырҡып ташланған.
Һылыу ҡыҙҙарҙы урлаған,
Өлкәндәрен - хурлаған,

Еребеҙҙе алмаҡ булып
Аждаһалай дулаған.

5. Аҡһаҡалдар йыйылышып
Кәңәш- төңөш иткәндәр,
Дүрт ырыуҙың аҫылдары
Аҡ батшаға киткәндәр.

6. Илебеҙҙең бейҙәре
Күп бүләктәр алғандар,
Аҡ батшаға барғандар,
Бергә-бергә йәшәрбеҙ,тип
Унан вәғәҙә алғандар.

7. Халҡығыҙға һүҙ бирәм,
Ерегеҙгә һис теймәм,
Иркен көн күреһегеҙ,
Тик яһаҡ биреһегеҙ – тигән аҡ батша.

8. Беҙ ҙә бурыслы ҡалмабыҙ,
Һаҡлашырбыҙ ил сиген,
Халҡыбыҙ бәхетле булһын,
Тыныс булһын ер-күгем – тип яуаплаған бейҙәр.

(Йыр «Ватаным», видео «Башҡортостан тәбиғәте»)

(видео-визитка Әлшәй)

9. Минең халҡым дуҫлыҡ өсөн
Йәлләмәҫ көсөн-тирен,
Йәнен бирер күрше-күлән
Йәшәһен өсөн имен.

10. Ерен биргән,һыуын бүлгән
Күптәргә ауыр саҡта,
Улар өсөн шәфәҡ уты
Һүнмәй янған усаҡта.

11. Әлшәй ере – меңдәр төйәге.Тамырҙары тәрәнгә төшөп һут ала, үҫә,ныҡыфына,йәшәй һәм йәшәйәсәк. Ә быйыл беҙ районың 80 йыллыҡ юбилейын билдәләйбеҙ.

12. Ватаныбыҙ – Башҡортостан.Тыуған төйәгебеҙ – Әлшәй,Башҡортостандың бер киҫәге.

13. Бормаланып аҡҡан гүзәл Дим, мәғрүр Сусаҡтау, киң билдәле –

Чехов һәм Шафран шифаханалары, Һыуһылыу төйәге – Асылыкүл, килен ташы – бына ниндәй Әлшәй ере.

14. ҡошом йылғыр ыласын,
Ағасым ғорур имән,
Өс сатлы һәнәкте халҡым,
Мәңгелек тамға иткән.

15. Батыры Салауаттай,
ҡыҙҙары Гөлфиәләй,
Сәсәне Розалиялай
Данлыларға илем бай.

(Йыр «Әлшәйем», видео «Әлшәйем минең»)

16. Райондың ғорурлығын,данын,байлығын арттырыуҙа Раевка 1-се һанлы мәктәбенең,(М.Буранғолов исемендәге башҡорт лицейының) өлөшө ҙур.Беҙҙең мәктәптә белем алған: район, колхоз, ойошма етәкселәре,уҡытыусылар,табиптар,тракторсылар, һауынсылар һәм башҡалар бик күп.

17.Дандарыңда һинең өлөш тә бар
Дан ҡаҙанған күпме батырҙы:
Тәүгеләрҙән – тәүге
Уларҙы һин
Тормош һуҡмағына баҫтырҙың.

18. Беҙ – башҡорт лицейының бөгөнгөһө,Ватаныбыҙҙың киләсәк эшсән ҡулдары.Беҙ – белемле,тәрбиәле,рухлы булһын өсөн уҡытыусыларыбыҙ тырышып эшләй.

19. Насар ғәҙәттәргә – наркоманияға,эскелеккә,тәмәке тартыуға ҡаршы көрәшеү һәм күңел сафлығы булдырыу өсөн янып йәшәйбеҙ.

20. Гүзәл Әлшәй яҡтарында
Бик һәйбәт бер лицей бар.
Беҙҙең башҡорт лицейы тип
Йөрөтә уны балалар.

21. Бөтәбеҙ ҙә яҡшы уҡый
Күп белергә тырыша
Барыһы ла шатлыҡ менән
Байрамдарҙа ҡатнаша.

22. Инглиз,немец,урыҫ,башҡорт

Телдәрен өйрәнәбеҙ
Алған белемдәребеҙҙе
Тормошта ҡулланабыҙ.

(Йыр «Мәктәбем»)

23. Башҡортостанда төрлө милләт халыҡтары дуҫ йәшәй. Беҙҙең мәктәптә генә 12 төрлө милләт балалары белем ала.

24. Кемдәр йәшәй беҙҙә?

25. Һорауға яуап бирәм.
Сөнки халҡымдың кемлеген
Мин беләм,яҡшы беләм.

26. Башҡорт йәшәй.

27. Татар йәшәй.

28. Сыуаш…

29. Урыҫ…

30. Уйҙары яҡты донъяға –
Килтереү бары ырыҫ.

31. Бер туғандай яуҙарҙа ла,
Бер туғандай һабанда ла,
Бер туғандай табында ла
Булһаҡ ҡына, нығыр дуҫлыҡ
үтә алмаҫ аслыҡ,хаслыҡ.

32. Башҡортостан – дуҫлыҡ йорто,
Татыулыҡта уның ҡото,
Туғанлыҡта - уның нуры,
Тоғролоҡта – уның уты.

(Йыр «Башҡорт телендә һөйләшәм»)

33. Мәңге йәшә, дуҫлыҡ иле!

34. Мәңге йәшә, Башҡорт иле!

35. Оран һалам башҡорт иленә:
Һатмаҫҡа тыуған ерҙәрҙе,
Бөтөрмәҫкә ҡош-ҡорттарҙы,
Бысратмаҫҡа шишмәләрҙе.

36. Оран һалам тыуған халҡыма:
Онотмаҫҡа туған телебеҙҙе,
Онотмаҫҡа ил тарихын,
Гәүһәребеҙ – нәҫел еребеҙҙе.

37. Оран һалам, башҡорттарым.
Хәстәрләйек көнөбөҙҙө.
Батыр Салауатыбыҙҙай
Һаҡлайыҡ ил-еребеҙҙе!

(С.Юлаев тураһында видео)

(видео-визитка «Әлшәй» аҙағы)

38. Һаҡлағыҙ башҡорт илен
Башҡорт илен – йыр илен
Йырҙар илен,моңдар илен
Башҡорт илен,йыр илен
Башҡорт илен.

39. Әйҙәгеҙ теләктәребеҙҙе әйтәйек:
- Илебеҙ имен булһын!
- **Булһын!**
- Балалар тыуып **торһон**!
- игендәр **уңһын**!
- таланттар күберәк **булһын**!
- Әлшәй ере бәрәкәтле **булһын**!